## Рабочая программа

по предмету башкирский язык (государственный)

**Пояснительная записка**

Рабочая программа составлена на основе следующих нормативно-правовых документов:

1. **Конституции РФ, ст. 43;**
2. **Конвенции о правах ребенка;**
3. **Федерального закона от 29 декабря 2012 г. № 273-ФЗ "Об образовании в Российской Федерации"**;
4. Приказа № 1089 от 5 марта 2004 "Об утверждении федерального компонента государственных образовательных стандартов начального общего, основного общего и среднего (полного) общего образования" (в соответствии с изменениями);
5. Приказа от 9 марта 2004 г. N 1312 Об утверждении федерального базисного учебного плана и примерных учебных планов для образовательных учреждений Российской Федерации, реализующих программы общего образования;
6. Постановления Главного государственного санитарного врача РФ от 29 декабря 2010 № 189 «Об утверждении СанПиН 2.4.2.2821-10 «Санитарно-эпидемиологические требования к условиям и организации обучения в общеобразовательных учреждениях»;
7. Закона "О языках народов Российской Федерации" (с изменениями и дополнениями) от 25 октября 1991 г. № 1807-I
8. Закона Республики Башкортостан «Об образовании в Республике Башкортостан» от 1 июля 2013 г. № 696-з;
9. **Концепции развития национального образования в Республике Башкортостан от 31 декабря 2009 г. № УП-730,Республиканской общеобразовательной программы развития образования на 2013-2017 годы от 30.12.2012 г.№549 с изменениями от 24.10.2013.№473;**
10. **Закона «О языках народов Республики Башкортостан»** (с изменениями и дополнениями) **от 15 февраля 1999 года № 216-з;**
11. Регионального базисного учебного плана и примерных учебных планов для общеобразовательных учреждений Республики Башкортостан, реализующих программы общего образования (Приказ министерства образования РБ № 824 от 06 мая 2014 года);

12. **Нормативной базы по предмету башкирский язык составлена в соответствии с программой по башкирскому языку для учащихся I-XIклассов школ с русским языком обучения. Составители: Усманова М.Г., Габитова З.М.-Уфа.2009.**

13. Учебного плана МАОУ Школа №37 г.Уфа Приказ № _357_ от «__31» ___ мая_____ 20_16_ г.(с изменениями Приказ№853 от 14 12.2015)

14. Положения о рабочей программе МАОУ Школа №37 Приказ № 226__ от «__18.04» 2016 г.

**УҠЫУСЫЛАРҘЫҢ БЕЛЕМ КИМӘЛЕНӘ ТАЛАПТАР**

**УҠЫУ ЙЫЛЫ АҘАҒЫНДА 4 КЛАСС УҠЫУСЫЛАРЫ ТҮБӘНДӘГЕ БЕЛЕМ ҺӘМ КҮНЕКМӘЛӘРГӘ ЭЙӘ БУЛЫРҒА ТЕЙЕШ**:

1. Һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):
   - уҡытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, уҡығанын аңлай алыу;
   - иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);
   - текстың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.
2. Уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы һөйләшеү (говорение):
   - бәләкәй күләмле текстың йөкмәткеһен һөйләү,
   - һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫҡулланып һөйләү,
   - диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү,
   - үҙең, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте һ.б. тураһында һөйләү,
   - ваҡиғаға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтеп биреү,
   - башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.
3. Уҡыу (чтение):
   - тексты дөрөҫ, шыма, талғын уҡыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
   - поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
   - уҡыған текстың йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
   - текстан һорауҙарға яуаптар табыу, уҡып күрһәтеү.
4. Яҙыу (письмо):
   - хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
   - ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу,
   - шундай уҡ текст буйынса йә картина нигеҙендә 2-3 һорауға яуап яҙыу,
   - бирелгән ситуация буйынса 2-3 һөйләмдән торған текст яҙыу,
   - ныҡлы әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы диктант, изложение, инша яҙыу (программала күрһәтелгән нормалар күләмендә).

**УҠЫУ- УҠЫТЫУ ПРОГРАММАҺЫНДА ПЛАНЛАШТЫРЫЛҒАН ҺӨҘӨМТӘЛӘРҘЕ ҮҘЛӘШТЕРЕҮЕН БАҺАЛАУ**

Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.

Уларға түбәндәгеләр инә:

- башҡорт теленән торлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре.
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға планлар төҙөү.
- һорауҙарға яҙма яуаптар һәм иншалар.
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар.

Башҡорт теленең ағым дағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеш диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалы үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәртесте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Уҡыу йылы башында инеү диктанты, сирек һәм йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

4- се класта түбәндәге эш төрҙәре тәҡдим ителә:

Күсереп яҙыу - 1

Диктант – 3

Инша – 2

Тест- 1

Башҡорт (дәүләт) теле дәрестәренән календарь-тематик план.4 класс өсөн.

| № | Дәрес темаһы | Уҡыусыларҙың эшмәкәрлеге | Үткәреү ваҡыты | |
|---|---|---|---|---|
| | | | Планл. | Факт. |
| 1. | 1 сентябрь. Белем көнө. 3 синыфта үтелгәндәрҙе ҡабатлау. | Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәрен һәм хәрефтәрен дөрөҫ яҙырға, әйтергә, айырырға өйрәнеү. Әңгәмә үткәреү. Тасуири уҡырға, уҡытыусының һорауҙарына яуап бирергә | 07.09. | |
| 2. | Мин мәктәпкә ни өсөн йөрөйөм? Һөйләм. | Мәктәп тураһында мәғлүмәтте ҡабул итеү, хеҙмәттең күмәкләп эшләгәндә еңел булыуын аңлау. Һөйләм менән дөрөҫ ҡулланырға. | 14.09. | |
| 3. | Контроль күсереү 1 «Минең дуҫым». | Текст буйынса һорауҙарға яуап бирергә, тексты ҡыҫҡаса һөйләргә, шиғырҙы тасуири уҡырға. Һөйләмдең төрҙәрен асыҡларға. | 21.09 | |
| 4. | Хаталар өҫтөндә эш. Мин ниндәй дәресте яратам?Һөйләм. | Үтелгәндәрҙе ҡабатларға | 28.09 | |
| 5. | Мин нимә уҡырға яратам? Исем. | Мәктәп, китап тураһында әҫәрҙәр уҡыу, әңгәмәләр үткәреү. Исем төшөнсәһен иҫкә төшөрөү, һөйләмдәр төҙөргә | 5.10 | |
| 6. | Мәктәптәге дуҫтарым менән таныштырайыммы? Исем. | Дуҫтар, синыфташтар тураһында әңгәмә үткәреү, фекер алышыу.Исемдәрҙе аңлатҡан һүҙҙәрҙе айырырға, зат ялауы ҡушырға, телмәрҙә ҡулланырға. | 12.10 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 7. | Беҙ мәктәптә нимә тураһында һөйләшәбеҙ. Исем | Һүҙлек байлығын байытыу. Ялғау ҡушып һүҙҙәр төҙөү. Һөнәрҙәр тураһында әңгәмә үткәреү, фекер алышыу. Яҙма эшкә әҙерлек | 19.10 | |
| 8. | Өйрәтеү иншаһы «Минең мәктәбем» | Каллиграфия нормаларын, үтелгәндәрҙе иҫтә тотоп яҙыу. | 26.10 | |
| 9. | Хаталар өҫтөндә эш. Беҙгә бергәләп күңелле. Сифат. | Текст менән танышыу, әңгәмәләшеү, һорау биреү, уға яуап биреү. Сифат менән танышыу, белгәндәрҙе иҫкә төшөрөү | 9.11 | |
| 10. | Мин – тәрбиәле бала. Сифат. | Яҡшы һүҙҙәр менән танышыу, телмәрҙә ҡулланырға өйрәтеү. Иптәше менән бирелгән темаға әңгәмә ҡороу мөмкин буласаҡ | 16.11 | |
| 11. | Минең өйҙәге бурыстарым. Сифат. | Антонимадрҙы иҫкә төшөрөү. | 23.11 | |
| 12. | Минең яратҡан шөғөлөм. Сифат. | Хобби, яратҡан эш тураһында әңгәмә. Һорауҙарға яуап бирергә | 30.11 | |
| 13. | Мин йәшәгән йорт, минең бүлмәм. Сифат. | Сифат дәрәжәләре тураһында әңгәмә. Хобби хаҡында белешмә. | 7.12 | |
| 14. | Мин йәшәгән Ер. Мин йәшәгән ҡала. Алмаш. | Йәнлектәргә ҡарата һөйөү тәрбиәләү. Уҡылған буйынса үҙ фекерен белдереү,иҫбатлау. | 14.12 | |
| 15. | Контроль диктант «Өфө» | Каллиграфия нормаларын, үтелгәндәрҙе иҫтә тотоп диктантты яҙыу. Өйрәнгән ҡағиҙәләрҙе практик ҡулланыу | 21.12 | |
| 16. | Хаталар өҫтөндә эш. Минең күршеләрем. Телмәр үҫтереү | Берлек, күплек мәғәнәһен нығытыу, телмәрҙә практик үҙләштереү. Уҡылған материал буйынса үҙ фекерен белдереү, иҫбатлау. | 28.12 | |
| 17. | Беҙҙең урам балалары. Беҙҙең уйындарыбыҙ. Алмаш. | Алмаш темаһын ҡабатлау, нығытыу, белгәндәрен телмәрҙә ҡулланыу, системалаштырыу. Һорауҙарға яуап бирергә, кескәй хикәйә төҙөргә. | 18.01 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 18. | Ауыл һәм ҡала тормошо. Һан. | Һүҙлек байлығын арттырыу. Һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуйырға өйрәнеү. Һорауҙарға яуап бирергә, тасуири уҡырға | 25.01 | |
| 19. | Ҡалалағы һәм ауылдағы эштәр. Һан. | Ҡала һәм ауыл тураһында уҡыу, әңгәмә ҡороу. Һөйләм төрҙәре менән танышыу. Тасуири итеп интонация менән уҡырға, һорауҙарға яуап бирергә | 1.02 | |
| 20. | Тыуған ерем мөғжизәләре. Һан. | Тыуған еребеҙҙең байлығы менән танышыу. Һорауҙарға яуап бирергә. | 8.02 | |
| 21. | Инша. Минең гүзәл тыуған яғым. | Һорауҙарға яуап биреү, илең тураһында яҙыу, һөйләй белеү | 15.02 | |
| 22. | Хаталар өҫтөндә эш. Йыл миҙгелдәре ниңә үҙгәрә? Рәүеш. | Һүҙлек байлығын арттырыу. Һөйләм төрҙәрен ҡабатлау. Төрлө һөйләм төҙөргә, уларҙы телмәрҙә ҡулланырға. | 22.02 | |
| 23. | Йәнлектәр йыл миҙгелен беләме? Рәүеш. | Урман йәнлектәре артынан күҙәтеү. Һорауҙарға яуап бирергә, тексты һөйләргә | 1.03 | |
| 24. | Бөжәктәр нисек йәшәй? Рәүеш | Бөжәктәр менән танышыу, уларға һөйөү уятыу. Яңғыҙлыҡ,уртаҡлыҡ исемдәрҙе дөрөҫ яҙырға, һөйләм төҙөргә | 9.03 | |
| 25. | Контроль диктант «Миҙгелдәр». Һүҙҙәрҙе дөрөҫ ишетеү һәм яҙыу | Каллиграфия нормаларын, үтелгәндәрҙе иҫтә тотоп диктантты яҙыу. Өйрәнгән ҡағиҙәләрҙе практик ҡулланыу | 16.03 | |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| 26. | Хаталар өҫтөндә эш. Һауа торошон белергә ниңә кәрәк? Рәүеш. | Һынамыштарҙы иҫкә төшөрөү, һауа торошон күҙәтеү | 23.03 | |
| 27. | Киләсәктә тәбиғәттә үҙгәрештәр булырмы?Рәүеш. | Киләсәк тәбиғәтен күҙ алдына килтереү. Иптәштәре менән фекер алышырға, һорау төҙөргә,яуап бирергә | 6.04 | |
| 28. | Мажаралар илендә. Ҡылым. | Ҡылымдың күплек ялғауын дөрөҫ ҡушырға,телмәрҙә ҡулланырға | 13.04 | |
| 29. | Минең иң ҙур хыялым. Минең кумирҙарым. Ҡылым. | Кроссворд төҙөргә | 20.04 | |
| 30. | Минең бюджет. Мин кейем һатып алам. Ҡылым. | Диалогты тасуири уҡырға, һөйләргә, һорауҙарға яуап бирергә | 27.04 | |
| 31. | Мин модалы кейем яратам. Ҡылым. | Һәр быуаттың модаһы хаҡында әңгәмә. Тасуири уҡырға | 4.05 | |
| 32. | Бүләк һайлайым. Ҡылым. | Бөгөнгө көндә файҙалы бүләктәр | 11.05 | |
| 33. | Тест . Һорауҙаға яуаптар. | Каллиграфия нормаларын, үтелгәндәрҙе иҫтә тотоп диктантты яҙыу. Өйрәнгән ҡағиҙәләрҙе практик ҡулланыу | 18.05 | |
| 34. | Хаталар өҫтөндә эш. Телмәр үҫтереү. Үтелгәндәрҙе йомғаҡлау. | Балаларҙың белемдәрен нығытыу | 25.05 | |

Иҫкәрмә: дәрестәрҙең байрамдарға тура килеү сәбәпле, һәр сирек аҙағында дикттанттар үткәргән өсөн, темаларҙың урындары алмашыныуы мөмкин.

**Программа материалы түбәндәге уҡыу әсбаптары нигеҙендә тормошҡа ашырыла:**

2-4-се кластар:

-«Башҡорт теле» дәреслеге (автор Х.А.Толомбаев, М.С.Дәүләтшина)

-Комплекслы предмет-ара тикшереү эштәре

Башҡорт телендә тәү башлап уҡырға, яҙырға өйрәтеү нигеҙҙәре

Башланғыс мәктәптә грамотаға өйрәтеү осоронда балаларҙы телмәр эшмәкәрлегенә (тыңлау,һөйләү, уҡыу, яҙыу) өйрәтеү төп йүнәлеш булып тора. Был эшмәкәрлек баланы грамотаға өйрәтеүҙән башлап, артабан аңлап тасуири уҡыу, грамоталы яҙыу, мәҙәниәтле аралашыу күнекмәләрен формалаштырыу, йәғни интеллектуаль-эшмәкәр, коммуникатив шәхес тәрбиәләүҙе күҙ уңында тота. Балаға рухи йөкмәтке һалыу, әхлаҡи тәрбиә биреү, эстетик, эмоциональ зауыҡ формалаштырыу туған тел аша бойомға ашырыла. Был йәһәттән телмәр эшмәкәрлегенә өйрәтеү ҙур әһәмиәткә эйә.

Был өлкәлә эш Л.С.Выготский, П.Я.Гальперин, Н.В.Талызина, Л.В.Занков, Д.Б.Эльконин- В.В.Давыдов, Л.Е.Журова һәм Ж.Ғ.Кейекбаев, Н.К.Дмитриев, Н.Х.Ишбулатов, К.Г.Ишбаев, А.А.Ғәлләмов, Т.Х.Аслаев, Х.А.Толомбаевтың фәнни- теоретик идеяларына нигеҙләнеп ҡоролған.

Башҡорт теле программаһы «Мәғариф тураһындағы закон»ға, Рәсәй Федерацияһының икенсе быуын дөйөм белем биреү хөкүмәт стандарттарына, «Башҡортостан халыҡтары телдәре законы», «Башҡорт мәғарифын үҫтереү концепцияһы» һәм башҡа норматив документтарға таянып эшләнде.

Рәсәй мәғарифын модернизациялау концепцияһында мәғариф алдында ҡуйған төп маҡсат- баланы шәхес итеп үҫтереү. Рәсәй Федерацияһының мәғарифты үҫтереү программаһында ла «Дөйөм белем биреү мәктәбен модернизациялау нигеҙҙә уҡыусыларға билдәле күләмдә белем биреүҙе генә күҙ уңында тотмай, ә уны шәхес булараҡ үҫтереү, танып белеү һәм эшмәкәрлек һәләттәрен күреү» ҡыҙыл һыҙыҡ өҫтөнә алынған. Шул маҡсаттан сығып башҡорт телен уҡытыуҙың төп мәсьәләләре билдәләнде:

- телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу: тыңлау, һөйләү, уҡыу, яҙыу,
- тел системаһын (фонетика, лексика, орфография, орфоэпия, грамматика, пунктуация) өйрәнеү,
- башҡорт теле фәне аша тирә-яҡты, йәғни баланы уратып алған мөхитте, объекттарҙы, күренештәрҙе танып белергә өйрәтеү,
- башҡорт теле ғилемен өйрәнгәндә баланың шәхси мөмкинселектәрен иҫәпкә алып, уның һәләтен,эрудицияһын формалаштырыу өсөн шарттар тыуҙырыу,

- тел ғилемен өйрәнеү процесында универсаль уҡыу эш төрҙәренә өйрәтеү; уҡыу эшмәкәрлегенең төп компоненттарын үҙләштереү (уҡыу мәсьәләһе, проблема ҡуйыу; эште планлаштырыу, ойоштороу; уҡыу мәсьәләһен сисеү; эште баһалау; рефлексив-контроль эшмәкәрлек);
- милли үҙаңды формалаштырыуға нигеҙ һалыу.

Тәҡдим ителгән уҡыу программаһы нигеҙендә башҡорт телен өйрәнеү, үҙ-ара кешеләр менән заманса мөғәмәлә итеү оҫталығын юғары коммуникатив кимәлгә ҡуйыу өсөн уҡытыу-тәрбиә эшен күрһәтелгән маҡсаттарға ярашлы итеп ойошторорға кәрәк.

## ПРИЛОЖЕНИЕ

**1- 4 –се класс укыусыларының башкорт теле буйынса белемдәрен, белеүҙәрен (умение) һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

**Телдән яуаптарҙы баһалау:**

Уҡыусылар6ың телдән һөйләмен, унының фонетик, грамматик яғы менән бер рәттән тасуири уҡыуы ла иҫәпкә алына. Телдән һорау формаһында үткәрелә торған күнегеүҙәр һәр дәрестә алып барыла.

**Тыңлап аңлау күнекмәләрен баһалау:**

1. “тулыһынса аңланы”
2. “өлөшсә аңланы”
3. “аңламаны”

**Уҡыусының монологик һөйләүен баһалау:**

1.- тәҡдим ителгән тема ( рәсем, ситуация) буйынса хикәйә төҙөй белһә;

- дөрөҫ интонация менән, тулы, эҙмә-эҙлекле итеп, теқсҡа баһа биреп, мөнәсәбәтен күрһәтеп һөйләй алһа;
- тупаҫ булмаған пауза хаталары ебәрелһә лә, **“5”ле** ҡуйыла.

4 -се класта бәйләнешле һөйләү – 10-12 һөйләмдән тәшкил итә.

2. - айырым паузалар, 1-2 һөйләм хатаһы яһаһа;
- уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ булмаған асыҡлаусы һорау бирелһә,”**4” ле** ҡуйыла
3. - теманың төп йөкмәткеһен асһа;
- 4-6 һөйләм хатаһы ебәрһә;
- уҡытыусы тарафынан икенән артыҡ асыҡлаусы һорау бирелһә йәки уҡытыусы ярҙамынан башҡа йөкмәткеһен һөйләүҙе башлай (тамамлай) алмаһа, **“3”лө** ҡуйыла.
4. - һөйләгәндә эҙмә-эҙлеклелек һаҡланмаһа;
- паузаларҙа теүәлһеҙлектәр китһә;
- 6- нан артыҡ һөйләм хатаһы һәм грамматик хата яһаһа, “**2”ле** ҡуйыла.

**Диалогик һөйләмде баһалау:**

1. - тейешле темпта дөрөҫ интонация менән һорау ҡуйһа;
- әңгәмәләшенең һорауҙарына тулы яуап ҡайтарһа, “**5”**ле ҡуйыла
2. - дөрөҫ һорау биреп, үҙе лә әңгәмәләшенең һорауына яуап бирһә, ләкин һөйләү ваҡытында уҡытыусы ярҙамына мохтаж булһа;
- 2-3 һөйләм хатаһы ебәрһә, “**4”** ле ҡуйыла.
3. - уҡытыусы ярҙамында ғына һорау бирһә йәки яуап бирһә;
- һорауҙар биргәндә, һүҙҙәр һәм грамматик формалар табыуҙа теүәлһеҙлектәр ебәрһә йәки өйрәнгән теманың бер өлөшөн генә үҙләштерһә;
- 4-5 һөйләм хатаһы ебәрһә, **“3**” лө ҡуйыла.
4. - әңгәмә ваҡытында ҙур ауырлыҡ менән генә һорау бирһә;
- һорауҙарға үҙ көсө менән яуап бирә алмаһа;
- 6- нан артыҡ хата ебәрһә, “**2**” ле ҡуйыла.

## Уҡыу тиҙлеген тикшереү

Башланғыс кластарҙан алып, һәр бала билдәле бер кимәлдә, тиҙлектә шыма итеп уҡый белергә лә бурыслы. Ғөмүмән, етеҙ, дөрөҫ, тасуири уҡыу, уҡырға өйрәтеү әҙәбиәт дәрестәренең төп мөһим талаптарының береһе. Уны, йәғни уҡыу тиҙлеген, 1 бала минутына күпме һүҙ уҡыуына ҡарап билдәләйҙәр. Һәр сирек һайын бер тапҡыр уҡыу тиҙлеге тикшерелә. Баһалар класс журналына ҡуйыла. Түбәндә башланғыс кластарҙан алып, уҡыусы минутына күпме һүҙ уҡырға тейеш булған һандар килтерелә. Уларға ҡарап, уҡыу тиҙлегенә ниндәй талаптар ҡуйылғанын билдәләргә мөмкин.

**Баһалар**

| Баһалар / кластар | «5» | «4» | «3» | «2» |
|---|---|---|---|---|
| I | 30 | 25 | 15 | 15-тәнкәмерәк |

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| II | 55 | 45 | 30 | 30-ҙан кәмерәк |
| III | 65 | 55 | 40 | 40-тан кәмерәк |
| IV | 80 | 75 | 55 | 55-тән кәмерәк |
| V | 100 | 90 | 80 | 80-дән кәмерәк |
| VI | 110 | 100 | 90 | 90-дан кәмерәк |
| VII | 120 | 110 | 100 | 100-ҙәнкәмерәк |
| VIII | 130 | 120 | 110 | 110-данкәмерәк |
| IX | 140 | 130 | 120 | 120-нәнкәмерәк |

**КОНТРОЛЬ ЭШТӘР**

**1-се сирек.**

**Күсереп яҙыу**

Ташбатҡан ауылы

Ташбатҡан ауылы һунарсылыҡ өсөн бик уңайлы урында урынлашҡан. Ул үркәсле-үркәсле тауҙар ҡуйынына һыйынып ҡына ултырған. Көнсығыш яҡлап Урал башлана. Артабан осһоҙ-ҡырыйһыҙ тауҙар китә. Унда әле лә әҙәм аяғы баҫмаған ерҙәр бар.

Ауылдың ҡояш байышы яғындағы тауҙар һөҙәк. Унда уйым-уйым урмандар йәшәрә. Арыраҡ оҙон туғайҙар һәм сейәле түбәләр китә.

Ауылдан түбән ҙур һаҙлыҡ бар. Уның ситенәрәк барып баҫһаң, һелкенеп тора. Шул һаҙҙың уртаһында элек ҙур бер таш булған. Берҙән-бер көндө ул һаҙға батҡан. Шуға күрә уны Ташбатҡан һаҙы тип йөрөтәләр. Ауылдың исеме лә шунан ҡалған.

*(Башҡортостан уҡытыусыһы 12/2007)*

**Диктант**

Зәңгәртүш

Зәңгәртүштең ояһы баҡсалағы еләклектә. Ул балаларына ашарға ташый. Мин ҡойма артына боҫтом да, ҡошто күҙәтәм.

Ем ҡапҡан Зәңгәртүш тәүҙә сейәлеккә килеп ҡуна. Ботаҡтан ботаҡҡа һикергеләй. Тирә-яҡты йәһәт кенә байҡап ала. Унан ҡоймаға күсә. Бында ла уңға-һулға ҡарана. Шунан ҡомға батҡан таш кеүек еләк араһына сума. Ул шул тиклем тиҙ юғала, хатта күҙ эйәрмәй ҡала. Мин онотолоп, һаман шул тирәгә ҡарап торам. Ә ул бөтөнләй башҡа урындан сығып оса. Күҙ яҙҙырған була, йәнәһе.
*(Башҡортостан уҡытыусыһы 12/2007)*

**Инша.**

Яратҡан йыл миҙгелем.

Минең яратҡан йыл миҙгелем - кыш. Был миҙгелдең айҙары – декабрь, ғинуар, февраль. Ҡыш яҡынлашыуын беҙ көндәр һыуытыуҙан, ҡар яуыуҙан, билдәләйбеҙ.

Ҡыш көнө Ҡорбан байрам, Яңы йыл, Раштыуа, Ватанды һаҡлаусылар көнө үткәрелә. Был миҙгел иң һыуыҡ, ғәжәпкүңелле, матур, оҙон. Тирә-яҡ ап-аҡ төҫтә була.

Башҡортостанда миҙгелдең уртаса температураһы -15С, яуым-төшөм – ҡар. Ҡыш көнө мин тауҙан сана шыуырға, конькиҙа, саңғыла йөрөргә, ҡар бабай яһарға, ҡар бөртөктәренең биҙәген ҡарарға яратам. Ҡыш һис шикһеҙ иң күңелле йыл миҙгеле!
*(Әйҙәгеҙ инша яҙайыҡ... Методик ҡулланма. Л. А. Ғайсина.)*

**Диктант.**

Яҙ килә.

Яҙ килә. Көндәр йылына.Һыҙып ҡына ҡар ирей. Ҡар көндән-көн йоҡара. Ҡыйыҡтан тамсы тама.кискә ҡарай көн һыуына. Ҡарҙың өҫтө ҡата. Тамсылар тамыуҙан туҡтай. Улар туңып, тынып ҡалалар. Иртән тағы ҡояш сығыр. Яҙғы матур күренештәр ҡабатланыр.
*(Ф.Ш. Сынбулатова. Икенсе синыф өсөн методик күрһәтмәләр)*